**Ҡәҙим АРАЛБАЙ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры**

# Ата Бәйет

(Аталар ҡәберлеге)

*XX—XXI быуаттарҙың бөйөк яҙыусыһы*
*Сынғыҙ Айтматов репрессия ҡорбаны булған атаһы —*
*Төрөкул Айтматов янына ерләнде.*

I

“Бәйет” — ҡырғыҙҙарҙа ҡәберлек ул,
Әҙәмдәрҙең һуңғы төйәге;
Туғандарҙың ята мавзолейҙа
Изгеләрҙән изге һөйәге.

Иҫке төрки телендә ул — Алла[1],
“Бәйет” — Алла йорто, баҡый йорт;
Хоҙай ҡаршыһына уҙғандарға
Бағышлана бәйет — һағыш-йыр.

Кеше бара унда саф күңелдән,
Айырылып та тыуған өйөнән.
Бәйет — мәңге хушлашыу ҙа йыры,
Ҡолаҡ һалһаң моңло көйөнә.

Башҡорттарҙа бәйет —
Бала саҡтан
Тыңлап үҫкән таныш моң даһа!
Кисен әсәй бәйет һуҙыр ине,
Апайҙарым шып-шым тыңлаһа...

II

Сынғыҙ аға!
Өндәшкән мин — дәүерҙәшең,
Уралымда һине күргән ҡәләмдәшең.
Башҡортостан, Мостай Кәрим дуҫың булды,
Аҡ тирмәбеҙ һинең менән ҡотло, нурлы.

[1] Bajat — бог (алла). Мәхмүт Ҡашғари. “Дивану лөғәт-ит төрк”. “Собрание тюркских наречий (языков)”. 1072—1074 гг. 520, 6.

Халҡың яҡын, һүҙең ялҡын йөрәктәргә,
Быңдай далан — яҙмыш төшә һирәктәргә.
Нисәмә кис бәйет яҙам, йөрәк һыҙа,
Һеҙҙәр ятҡан мәҡанәттән уйҙа уҙам.

“Ата Бәйет” — Айтматтар ҡәберлеге,
Ҡырғыҙҙарҙа төбәктең бер ҡәҙерлеһе.
Төрөкул ҡарт! Ҡәберең ине билдәһеҙ,
Ир ҡашҡаһы булғанда ла киң илдә һеҙ.

Әле инде улың менән икәүһегеҙ,
Баҡый йортта бергә “донъя көтәһегеҙ”.
“Ата Бәйет” — һабаҡ бирер изге урын,
Әүлиәләр әшкәртәме, һибеп нурын?..

Ҡырғыҙ иле, “Манас” моңо, Сынғыҙ йыры —
Илдән илгә, телдән телгә илсе юлы.
Билдәһеҙлек йонсотҡанда ҡалһам йырһыҙ,
Ҡулға алам китабыңды, бөйөк ҡырғыҙ!

Һинең һүҙең, Сынғыҙ ағай, — ижад тыуыу,
Сәскәнеңдән ерҙә яңы сәсән тыуыр.
Һеҙ ҡалдырған усаҡтарҙың тере ҡуҙы
Баҙлай, дөрләй, ләүкей яңы өмөт тулып.

Халҡың зары, ил яҙмышы бәйет булып,
Тарих булып йөрәгеңә уйылғаны;
Дала иңләп, тауҙар ҡырлап таралғаны,
Бауырҙаштар зиһененә һарылғаны...

Илең барҙа “Ата Бәйет” ҡурсаланыр,
Бөйөк Манас яңғыраған телең барҙа.
“Ата Бәйет” — Айтматтар аманаты,
Бар донъяны уйға һалыр даны, аты...

III

Олатамдың күңеле ниңә ҡатмаһын —
Тыуған ерҙә уға ҡояш атмаған;
Таналыктан һыу ҙа эсә алмағас,
Ирендәре көйөп, ярылып сатнаған.

Олатайым Шәмсетдинде Себерҙә
Сереттеләр һис бер ғәйепһеҙ көйгә.
Унық йөрәк уты менән иретеп,
Таш күмерҙе сығарҙылар күп итеп.

Ҡоштар кеүек тупланышып Себерҙә
Йәшәнеләр шөкөр итеп, сер бирмәй.
Олатайым уландарын-ҡыҙҙарын —
Ҡурсаланы ғәзиз рухи ҡуҙҙарын.

“Ҡулак балалары” тигән мөһөрҙө
Күтәрҙеләр, күмергә ҡан түкөрөп.
Ҡорманғәле менән кинйә Әнүәрҙе
Ҡорбан итте олатайым Себерҙә.
Ҡорбан салды, Ҡөрьән, аят уҡытты,
Аяу белмәҫ заман башҡа зыңҡытты...

Черемхауҙың зыяраттарын ҡараһаң,
Йөрәгеңә һары һағыш һарыла.
“Рәхмәтуллин, Төхвәтуллин, Ишемов...” —
Һәр береһе мине белгән кешеләй,
Ялбарышып ҡарай ҡәбер таштары,
Илдән алыҫ ҡалған ғәзиз баштары.

Бабаларым яҡшылыҡҡа инанған,
Шахтер шәме Баҡый йортта тоҡанған.
Уралынан алыҫтарҙа табыштыҡ,
Әруахтары тапһын берүк тыныслыҡ...

Донъялағы иң ҙур бәхет — балалар,
Бала өсөн йәһәннәмгә баралар...
Олатайым, уландарын ҡосаҡлап,
Ята Себер киңлегендә, күс һаҡлап,
Тере ырыу, туҙмаҫ оя — ул саҡта
Дөрләр әле яңы көслө усаҡтар...

IV

Төрөкул да Сынғыҙ менән серҙәштәр,
Аллаһыбыҙ ҡушыуылыр — гүрҙәштәр.
“Ата Бәйет” — һуңғы бишек, баҡый йорт,
Осто киске шәфәҡ батҡас бәйет-йыр...

Төнгө күктә, йондоҙ яныпп, аҡ эҙ һуҙҙы,
Йондоҙ-ҡәләм йөрәгемә һағыш һыҙҙы.
Был иҫкәртеү — юғалтыуға ишарамы?..
Эй, әруахтар, һеҙгә арнап, бәйет яҙҙым.

Эй, туғандар, балҡый яңы йондоҙоғоҙ,
Һеҙҙең хәҙер төнөгөҙ ҙә — көндөҙөгөҙ,
Һеҙгә ҡарап үлсәнәлер аҙымыбыҙ,
Һеҙҙең нурҙан фекер төйнәп, уй төҙөйбөҙ.

Олатайҙар һеҙгә мираҫ ҡалдырғандар —
Күңелегеҙгә рухи мәркәз һалдырғандар.
Телдән телгә күсә ҡырғыҙ дастандары,
Һәр балаға серле донъя асҡандары.

Атайыңдан күскән һиңә хаҡ һыҙаттар —
Халҡы өсөн яныу, йәнен ҡылыу фиҙа,
Йотом һыуы ҡалһа, һонор йәш балаға,
Башына ла инеп сыҡмаҫ эҙләү файҙа...

Тормош ҡай саҡ — айһыҙ төндөр, ҡара асман,
Йылан-сая, упҡын, ҡапҡан — ҡайҙа баҫма!
Һеҙҙең ғүмер — ерҙә беҙгә яҡты йондоҙ,
Сабыр юлсы, ай юҡ, тимәҫ, йондоҙ барҙа.

Әҙәмдәргә ғүмер биргән Аллаһыбыҙ,
Барыбыҙ ҙа Хаҡ Тәғәлә балаһыбыҙ.
Тәҡдиреңә нимә яҙған — фарыз ғәмәл,
Алда көтә Баҡый йортҡа бараһыбыҙ...

Күктәр илай. Тик ер йоҡлай, күреп төштәр.
Күкрәк һыҙып, күҙҙәремдән тама йәштәр.
Эй, яҙмышташ! Күңел тулған, итмә ғәйеп,
Ошо ерҙә, рөхсәт әйлә, тамам бәйет...

V

Ҡырпағайҙа башланды йыр, ҡырпаҡта,
Елгәнендә ғүмер ҡуян ҡурҡаҡтай.

Осрағанға “Ата Бәйет” юлымда,
Хоҙай һонған йырлы ҡаурый ҡулыма.

Бәйет иңрәй моңһоу заман көйөнә,
Өмөт шәмем леп-леп яна күңелдә.

Бәйет тынды аҡъюлайҙа, аҡ юлда
Саба буран, туҙҙырып та аҡ ялдар.

Ер яҡтырҙы — мамыҡ яуҙы өнөмдә
Аҡ болоттан — Сынғыҙ тыуған көнөндә[2]...

Амин.

Ноябрь—декабрь, 2013 йыл.

---

[2] Сынғыҙ Айтматовтың тыуған көнө 12 декабрь (аҡъюлай).